# Зөлҡәрнәй атлы яугир хәтирәләре

*1994 йылда июнь айының ике аҙнаһын йәмәғәтем Флүрә Ғөбәйҙулла ҡыҙы һәм дүрт йәшлек Шамил ейәнем менән Баймаҡ ял йортонда үткәргәйнем. Шул мәлдә фольклорсы ҡомары мине Баймаҡ районы Иҫән ауылында 1917 йылда тыуған Йәрмөхәмәтов Зөлҡәрнәй Әнәс улы менән таныштырҙы. Зөлҡәрнәй Әнәс улының шәжәрә тамыры беҙҙең Яңы Собханғол — Янһары (Ейәнһары) ауылына барып тоташа. Бөйөк Ватан һуғышына тиклем яҙмыш уны боронғо бабалары эскән һыуҙы татырға, улар һулаған һауаны һуларға форсат бирә. Ул Иҫке Собханғол, Байназар мәктәптәрендә уҡыта. Фронтҡа Бөрйәндән китә. Яу юлының бөтә ауырлыҡтарын да, ҡоралдаш яҡташтарын юғалтыу ҡайғыһын да, аҙаҡ килеп фашистарҙы еңеү шатлығын да ул Бөрйән егеттәре менән бергә кисерә. Шул туралағы хәтирәләрен мин магнитлы таҫмаға яҙҙырғайным. Шуларҙы изге аманат итеп, түкмәй-сәсмәй, телмәрҙәрен үҙгәртмәйенсә, һүҙмә-һүҙ һеҙгә еткерәм, яҡташтарым. Был яҙмаларҙы Зөлҡәрнәй ағайҙың үҙенең һәм уның яуҙаштары булған Бөрйән егеттәренең изге рухына бағышлайым.*

***Әхмәт* СӨЛӘЙМӘНОВ**

*Зөлҡәрнәй Йәрмөхәмәтов Талҡаҫ күле буйында*



Мин Бөрйән районында уҡытыусы булып эшләй инем. 1942 йылдың 15 ғинуарында 270 кеше Бөрйәндән һуғышҡа киттек. Бөтә район халҡын биләп алған моңһоулыҡты көсәйтергә теләгәндәй, шундайын томанһыу ине, етмәһә, ҡар яуа. Тәбиғәт тә ҡайғылы һымаҡ тойолдо. Район үҙәгенә кеше күп йыйылған ине. Бөтәһе лә илаша-илаша беҙҙе оҙатып ҡалды. Әллә нисәмә саналы ылау менән Исламбай, Аҫҡар, Брәтәк аша Красноусольскийға барып, шунда урынлаштыҡ.

### Тәүҙә барабан ҡаҡтым, унан командир булдым

Красноусольскийға барғас, һуғыш уйындары башланды. Уйындан тыш, һәр кемгә һөнәре буйынса эше табылып ҡына торҙо.

— Барабансы юҡ. Кем барабан ҡаға белә? — тип һоранылар. Мәктәптә эшләгәс ни, уны күргән бар, ҡағып ҡарағаным да булды. Шуға ла, уйлап та тормай:

— Я! — тигән булдым.

Тәүҙә бына шулай барабансы булып йөрөнөм. Махсус әҙерлекле барабан ҡағыусы булмау сәбәпле инде. Шунан бер йәверәй килде. Ул минән оҫтараҡ ҡаҡҡас, уны барабансы итеп ҡуйҙылар.

Мин кадровый әрмелә булған кеше түгелмен. Иҫке Собханғол мәктәбендә, унан Байназар мәктәбендә военрук булып эшләнем. Әрме һурпаһын татымаһам да, әҙме-күпме хәрби белемем бар ине. Шул турала китаптар уҡылды. Винтовка менән эш итергә өйрәнелде. Бер проверка ваҡытында бөтә сержанттар менән берәм-берәм әңгәмә үткәреп, полк командиры полковник Болотов менән дивизия командиры Вершинин һорау алды:

— Ҡайһы яҡтан?

— Бөрйәндән килһәм дә, тыуған районым Баймаҡ минең...

— Значит, башкир?

— Башҡорт...

— Башҡорт, башҡорт.

— Салауат Юлаевты беләһеңме?

— Так точно!

— Белемең?

— Һуғышҡа тиклем педучилище тамамланым.

— Хуп!

Һорауҙарының барыһына ла, Уставса иттереп, ҡыҫҡа һәм дөрөҫ яуап бирҙем. Шунан шунда уҡ сержант званиеһы бирҙеләр, мине взвод командиры итеп тәғәйенләнеләр. Тағы бер взводҡа Бөрйәндән Ҡарағоловты ҡуйҙылар. Бөрйән кешеһе булараҡ, бөрйәндәр күп булғас ни, һалдаттарыма күберәк Бөрйән тураһында һөйләй торғайным. Бөрйән егеттәренең байтағы кесе командир булыуға өлгәште. Байғаҙы ауылынан Эткәрин Йомағужа отделение командиры ине. Тарыуалдан — Яңы Усмандан Малабаев Насретдин, Яңы Монасиптан ике бер туған Көмөшбаевтар булды. Шулар бөтәһе лә полк мәктәбендә бик яҡшы уҡып сыҡты. Сержант званиеһы алды. Улар араһында Иҫке Собханғол ауылынан Әбдрәшитов Әйүп ағай ҙа бар ине.

Оҙаҡламай һуғышҡа индек. Һуғыш — һуғыш инде. Уны һөйләп тә бөтөрлөк түгел. Сосниковскиймы, Сосновскиймы — шул бер ауылда тора инек, бомбаға эләктек. Ҡайҙа ҡарама — атыш, ҡайҙа барма — атыш... Ҡайҙа баҡма — ҡан да үлеш...

Һарағы ауылынан Ҡарасурин Фәтхерахман бик шәп һунарсы булған. Һуғышҡа тиклем һигеҙ бүре алған, баҫтырып йөрөп: һуҡҡанын һуғып, атҡанын атып. Ул оҫта разведчик булды. Бик дастуйын кеше ине. Тик аяғынан яраланды. Йәҙрә үксәһенән үтеп киткән ине. Госпиталгә китте. Ҡабат күрә алманым. Шул ауылдан Миндеғолов тигән егет бар ине (исеме онотолған). Ул минометсы булды. 1942 йылдың 8 авгусында немецтар менән ҡара-ҡаршы атышҡан саҡта заряжающийы, алабарманланып, минаны көбәккә баш яғы менән төшөргән дә ҡуйған — эстә ярылып китеп, шунда был яҡташым үлеп ҡалды.

Унан алда уның бер ҡыҙығы булды. Мина запалын ҡәләм башы итеп алыр өсөн (ҡәләменә кейҙермәк булып), соҡоп ултырған. Шул саҡ, запалы шартлап, бармағын өҙҙөргән (*көлә*).

Бер мәлде, сәғәт дүрттәр тирәһе булғандыр, егеттәр ашҡа китте. Араларында отделение командиры Эткәрин Йомағужа ла бар ине. Шул һөйләне. Ашҡа барғанда, Байназар ауылынан Ҡарағолов Сибәғәт тигән ағай аш бешеп ултырған ҡаҙанға төшөп, ҡазалана. Ул нисек булғандыр. Ҡаҙан ергә ултыртылған булдымы, әллә ерҙе соҡоп яһалған усаҡта ултырҙымы... Шулай булып, бының аяғы берәй нәмәгә эләгеп, йығылдымы, әллә котелоктарын тотоп, сиратҡа баҫҡан һалдаттарҙың берәйһе аңғармай төртөп ебәргәнме — тәке белә алманым. Хәйер, уны тикшереп торорға форсат та юҡ ине.

### Бөрйәндең ике егетенең разведчик булғаны

Дондың һул яҡ ярында оборонала яттыҡ. Йылға аръяғында, ҡаршыбыҙҙа ғына бер ауыл бар ине. Ана шунда 710-сы полкта хеҙмәт иткән Бөрйән районы егете Ҡарасурин Ғабдрахман тәүге разведкала ҡатнашты. 175-семе әллә 325-се полктанмы Янһары (Яңы Собханғол. — ***Ә.С.***) ауылынан Мырҙабаев та (исеме онотолған) разведкаға барҙы немецтар яғының хәлен хәлләргә. Ике полктың да разведчиктары буш ҡайтманы — ғәмәлгә ярарлыҡ “тел” алып килде.

Мырҙабаев оҙон кәүҙәле, ғәйрәтле, сос егет ине. Үлсәп ҡарағанда, 120 кило тартҡайны. Донды аша сыҡҡан да был, бер немецты эләктереп, бөрә тотоп, елтерәтеп алып киткән дә барған.

— Шулай итмәй ҙә булмай инәһеҙҙе. Немецтар йоҡламай. Етмәһә, таң атып килә, — тип һөйләп торғайны Мырҙабаев, мин унан, нисек тоттоң, Мырҙабай, һөйләп бир әле, давай, тип һорағас.

Әсирен һөйрәкләгән килеш килә ятһа, бер төркөм немец һалдаттары килеп сыҡҡан. Автоматтан бер очередь бирһәң — түшәп кенә һалмалы, ти. Юҡ, тауыш сығарырға ярамай. Хәйер, Мырҙабаевта улар ҡайғыһы булмаған. Нисек тә шул төркөмгә һиҙҙермәй генә, үҙенең немецын имен-аман алып ҡайтып еткереү хаҡында уйлаған. Уйы уй көйөнә ҡалмаған: уны полк штабына тапшырған.

Хәҙер шул разведчик Баймаҡ районында мулла булып йөрөй. Бер күҙе һуҡыр. “Һуғыштан һуҡыр булып ҡайтты микән?” — тип уйлағайным. Баҡтиһәң, 1954 йылда бесәндә ятҡанда, ағасҡа эленһен тип, салғыһын ташлаған икән, уныһы ҡаҡлығып китеп, күҙенә тейгән дә ҡуйған. Хәҙер ул 90-ға етеп килә — әле лә хәле һәйбәт. Курск һуғышында ҡатнашыусылар осрашыуына саҡырғандар — бара алмаған. Мин дә бара алманым.

## Ялда ятҡанда

Дон ярында оборонала ята торғас, 1943 йылдың 19 ғинуарында шул урында ҡаты һуғыштар булды. Унда үлгән кешенең һаны-иҫәбе юҡ ине: һәләк кү-үп булды беҙҙән дә, немецтарҙан да.

Был һуғыш шулай башланды. Оборонала оҙаҡ ҡына ятҡандың һуңында, әйтмәһәләр ҙә, тиҙҙән наступление булырға тейеш икәне “йүкә телефон” аша беҙгә мәғлүм булғайны инде. Ҡолаҡтан-ҡолаҡҡа шундай һүҙҙәр йөрөнө:

— Был шомло тынлыҡ оҙаҡҡа бармаҫ...

— Командование немецҡа берәй этлек уйлайҙыр, моғайын...

— “Эшһеҙ” ятып, немец та ялҡып бөткән, ти...

Беҙҙең тапҡырҙан ғына сталинградтар (йәғни Сталинград фронтыныҡылар. — ***Ә.С.***) алға киткән ине инде. Ә беҙ, ялға сығып, рәхәтләнеп йөрөп ятабыҙ. Йыуынып, ҡырынып, әҙәм төҫөнә инеләнде. Һәйбәт итеп ашаттылар. Главный Баш командующийҙың нормаһын да (араҡы ла) бирҙеләр... Ул ваҡытта мин эсмәй инем. Ғөмүмән, беҙҙең егеттәр эсмәне. Арабыҙҙан бер Эткәрин генә эскенән баш тартманы.

Һалдатҡа саҡ ҡына досуг бир. Ул ни эшләргә белә. Балыштанмы, Байыш ауылынанмы шул Муллабай тигән бер егет ҡурай уйнай. Йырлағаны — йырлай, бейегәне — бейей. Беҙҙең менән сыуаштар ҙа бар ине. Улар ҙа үҙҙәренсә күңел аса. Рус егете, зыу килеп, гармун уйнай... Ҡыран-фәләмәт булабыҙ. Араҡыһыҙ ҙа һалдат ғүмеремдә иҫкә алырлыҡ бер рәхәтлек күреләнде.

## Ете егеттең ун ете немецты эләктергәне, беҙҙекеләрҙе немец алып киткәне

Декабрҙең ун бере көнө беҙҙе тревога менән үҙебеҙ оборонала ятҡан позицияға кире алып килделәр. Инде беҙ Воронеждан ун саҡрымда, Максимовка тигән ауылда ятабыҙ. Мин элек һул яҡта инем, хәҙер үҙемә таныш булмаған уң яҡҡа тура килдем. Иртәнсәк, таңғы дүрттән егеттәр ашҡа китте. Шул саҡ бик ҡаты ут астылар. Ҡайҙа ҡарама — ракета. Ҡыҙылы ла яна, йәшеле лә бар. Штабтан миңә шылтыраттылар: “Круговая оборона тотоғоҙ! Сигенмәҫкә бер аҙым да!” Шул арала һуғыш башланды. Ике сәғәт үтеүгә, 7—8-ҙәрҙә, тып-тын булып ҡалды. Мине штабҡа саҡырттылар. Барһам — уның тетмәһен теткәндәр. Аңғанса, ун ете немецты алып килгәндәр. Уларҙы ҡулға алыусыларҙың күбеһе Бөрйән егеттәре ине. Шул ун етенең береһе — сын полка. Ун өс йәшлек малай. Былардан һорау алалар. Мин тыңлап ултырам”.

— Нишләп һөжүм башланығыҙ? — ти һорау алыусы офицер. Унда беҙҙең шифровальщица ла бар ине (ул әле лә тере, Мәскәүҙә йәшәй). Врач Вера Петровна ла шунда ултыра (ул да Мәскәүҙә йәшәй).

— Һеҙгә ашарға кәрәкме? Кәрәк. Йылы кейем кәрәкме? Кәрәк. Ана, һуғышығыҙ ҙа, урыҫтарҙан алығыҙ. (Немецтың кейеме хөрт ине. СССР-ҙы йылы ҡулда, йәшен тиҙлегендә буйһондороу ниәтенән һуғыш асҡас ни, шулай булмай, ҡалай булһын. — ***З.Й.***). Әле улар ялға сыҡҡан, тинеләр ҙә беҙҙе был яҡҡа оҙаттылар, — тип яуап бирә немецтар.

Ике яҡ та атмаған саҡта, төнөн, беҙҙекеләр генә түгел, немецтар ҙа разведка ебәргәндәр икән. Беҙҙекеләр ун ете кешене алып килгән, немецтың разведкаһы беҙҙең ҡырҡ кешене алып киткән. Быны мин һуңынан ғына уточнить иттем.

Байыш ауылынан Шахморатов Аллабирҙе беҙҙең менән бергә хеҙмәт итә ине. Немецты ул биш тапҡыр алып килде. Орден да алды бының өсөн. Уға тиклем бер миҙалы ла юҡ ине. Бик ҡыйыу, батыр егет ине. Шул егет разведчиктарҙың старшийы булып бара.

— Ете кеше ун ете немецты нисек эләктерҙегеҙ ул? — тип һорауға, Аллабирҙе былай тип яуап бирә:

— Эйе, ете кеше инек. Немецтарҙың алдында уҡ ятабыҙ. Тәмәке төтөнө килә, тәмәкеселәрҙе ҡотортоп. Бер нисек тә эш сыҡмай. Ул арала таң да яҡтырып килә, — ти. — Ҡуҙғалыр әмәл юҡ — ҡар шығырҙай. Бара-бара әҙерәк епшетеп ебәрҙе. Бер саҡ, геү килеп, немецтар һөйләшеп килә үҙәк буйлап. Беҙ ҙә үҙәктә ятабыҙ тегеләрҙең алдында ғына. Хәҙер нисек “тел” итеп алғандарҙы ҡалдырмай был хәлдән сығырға? Тегеләр — ҡырҡлаған кеше. Плащпалаткаға һалғандар ҙа бер нәмәне һөйрәп алып килә яталар. Хәҙер ут астыниһәк, быларҙы ҡырырбыҙ инде ҡырыуға, ләкин беребеҙ ҙә һау ҡайта алмайбыҙ. Шуға күрә: “Юҡ, теймәйек. Үтеп китһендәр, әйҙә”, — тип ҡарар иттем. — Тегеләр үтеп кенә киткәйне — тиҙерәк үҙебеҙҙең часкә ҡайтыу яғын ҡаралынды. Ҡайтып еттек тә ун ете “тел”де лә штабҡа тапшырҙыҡ. Ҡайтып еткәс, белдек. Беҙ “тел” артынан йөрөгән арала немец разведкаһы беҙҙекеләрҙе урлаған...

Баҡһаң, улар ҡулына шул уҡ көндө яңы ғына килгән 24—25-се йылғы тәжрибәһеҙ егеттәр эләккән, имеш.

## 24—25-се йылғылар өсөн үс алынды

Алайтып-былайтып, ун икеһе көнө, әйткәнемсә, һөжүм итергә булдыҡ. Позициябыҙға кире килдек. Беҙгә бөтәһе лә таныш бит инде: атыу нөктәләре бар, аҙыҡ-түлек бар, миномет бар, пулемет урынында... Шунда ҡырып һалдыҡ та ҡуйҙыҡ немецты. 270 немецты үлтереп һалып ҡуйҙыҡ беҙ — Бөрйән егеттәре. Күпмеһе яралы булған. Улары ла етерлек. Ни өсөн тиһәң, егеттәрҙең теге 24—25-се йылғылар өсөн асыуы шул тиклем ҡабарған. Беҙҙекеләрҙән ике кеше генә һәләк булды. Яраланыусылар булманы. Шөкөр! Бына бит ҡалай була.

Шуныһы ҡыҙыҡ. Немецтар килеп ингән ыңғайы полк командиры:

— Позицияны биреп, тиҙ арала икенсе оборонаға күсерергә! — тип приказ биргән. Тегеләр йәшел ракета аталар, беҙҙекеләр — ҡыҙылды. Беҙҙекеләр уйлаған: былар беҙҙең өҫкә килергә сигнал ала, тип. Тегеләр иһә, ҡыҙылдар һөжүмгә күсә икән, тип уйлаған. Ана шунда Ғафури районы егете Ҡужин ҡамауҙа тороп ҡалды. Исемен хәтерләмәйем. Бухгалтер ине. Командиры булған сержант дәрәжәһендәге рус егете менән, солаһын табып, икәүләп бер немецты үлтергәндәр ҙә ҡасҡандар. Полк мәктәбендә улар пулеметсылыҡҡа уҡығайны. (Әйткәндәй, шул һөнәргә өйрәткән Мочехин тигән лейтенант хәҙер Молдавияла тора. Юрист, полковник).

Ике-өс көндән мәйеттәр һаҫый башланы. Немец парламентёрҙары: “Давай, мәйеттәрҙе йыйып алырға мөмкинлек бирегеҙ!” — ти. Биреү юҡ. Асыу ныҡ ҡабарған. Ә теге “сын полка” тигән немец малайы парашют менән Францияға, Норвегияға, Грецияға, Кипрға төшкән. Бында ла самай фронт линияһына уны парашют менән һелтәп киткәндәр. Уға: “Имен-һау ҡайтырһың. Әйҙә, уҡы. Һуғышма”, — тип парламентёрға тапшырып, ҡайтарып ебәрҙек.

Фронтта баштан кисергәндәрҙе, күргәндәрҙе һөйләһәң, һөйләп бөтөрлөк түгел.

### Немецтың ике полковнигының ойоҡсан ҡасҡаны

Воронеж өлкәһенә килеп еттек. Хәҙер Харьков өлкәһенә сығырға тейешбеҙ. Шунда (районын онотҡанмын) ете кеше менән боевое охранениела иң артта ҡалдым. ПТР-ыбыҙ бар. Ҡиләбеҙ. Шунда арттағылар әйтә:

— Бер пар ат килә, — ти. — Сабып килде-килде лә, аҫта бер юл булған, шунда төштө лә китте. Абайлаңҡырап ҡараһаҡ — немецтың ике полковнигы. Инде беҙҙән бер йөҙ метр самаһы ерҙән баралар. Туҡратырға итәбеҙ — туҡрамай. Сөйәрембетов тигән шәп атҡысыбыҙ бар ине. Мин әйтәм:

— Полковниктарына теймә. Аттарына ат!

— Есть такое дело!

Сөйәрембетовым ПТР-ҙан ике атты ла үтә атты ла ҡуйҙы. Теге икәү тарантастан төштөләр ҙә йүгерә башланылар. Ҡасып барышлай атышалар — теймәй. Мин әйтәм:

— Сөйәрембетов, һин тороп тор, мин атып ҡарайым.

Ҡарабинымдан аттым — юҡ, туҡрамайҙар. Шинелдәрен сисеп ташлап ҡаса башланылар. Быймаларын сисеп ташланы былар. Ойоҡсан йүгерәләр. Мин әйтәм:

— Етәр инде, давай, аттыҡ та ҡуйҙыҡ! — тим. Аттыҡ. Тәкмәсеп барып яттылар. Барып, документтарын алдыҡ. Быймаларын ҡарайбыҙ — ап-аҡ бойма. Табаны ҡалын. Ауыр үҙе. Аяҡтарын ҡараһаҡ — фетровый ойоҡ.

Ойоҡсан ҡасһалар ҙа, ҡотайтманыҡ ике фашисты.

### Мадъяр егеттәре менән ун туғыҙ немецҡа "мунса" ойоштorҙоҡ

Үҙебеҙҙекеләрҙе ҡыуып еттек. Ҡилеп етһәк, былар бер ауылды алған. Батальон командиры бер күҙе һуҡыр Макаров тигән татар ағай ине. Шуға барҙым.

— Был оста оборона алаһың. Артабан указание алырһың. Телефон үткәрерҙәр. Шунда бер йорт булыр. Бар шунда, — тине.

Ҡиттек. Ап-аҡ халаттанбыҙ. Саңғы менән момент барып еттек. Барһаҡ — ҡырҡлаған мадъяр тора ҡул күтәреп. Үҙҙәре, эй, илашалар. Мадъярҙарҙы, итальяндарҙы беҙҙекеләр ул хәтлем обижать итмәне. Бер йортҡа ымлап:

— Был нимә? — тим. Араларында русса белеүсе бар икән.

— Мунса, — ти.

Баҡһаң, быларҙы ҡарауылға ҡуйып, немецтар мунса инеп ята икән. Ҡараһаҡ — ун туғыҙ немец. Атырға тура килде. Атмаҫ инек, икәүһе автоматтарына йәбешмәк булғайны.

Шулайтып, мадъяр егеттәре менән (ни тимә, үҙебеҙҙең боронғо ҡәрҙәштәребеҙ бит улар) бер һүҙҙән булып, ун туғыҙ немецҡа "мунса" ойоштorҙоҡ.

### Госпиталдә

Мин тәүгә 1942 йылдың 8 августында яраланғайным. 1943 йылдың 3 ғинуары көнө Харьковта тағы яраландым да госпиталгә юлыҡтым. Дауалана торғас, мин "ходящий раненый" булып киттем. Һуғыш булыуына ҡарамаҫтан, уҡытыусылыҡ ҡомары китмәй. Бөтә нәмәне лә белге килә. Ваҡыт тейгәндә, ҡарап йөрөлә.

Ҡалала дүрт проспект бар икән: Ленина, Сталина, Ҡарла Маркса, тағы берәү. Трамвай линияһына, осонан — осонаса, бөтә партия эшмәкәрҙәрен, йәврәйҙәрҙе, уларҙың балаларын аҫып киткәндәр немец фашистары.

Беҙҙе бейек тауҙың башында ултырған дүрт ҡатлы 80-се мәктәпкә урынлаштырғайнылар. Ер аҫтында ике электр станцаһы бар. Етерлек һыу запасы булдырылған. Мәктәп алдында — ер аҫты нығытмаһы. Бетондан ҡойолған, өҫтө тимер менән ябылған: һыу ҙа, тын да үтерлек түгел. Унда ташкүмер тултырылған.

Был мәктәп хәрби госпиталь итеп әҙерләнгән булған икән. Һәр этажда — икешәр, дүртәр янғын һүндергес насос. Ҡыйыҡ өҫтөндә — ҙу-ур тимер һауыттар. Унда һыу тултырылған. Хәт-тәр!

Әсиргә төшкән немецтарҙы ла ошонда алып килделәр. Уларҙы һәйбәтләп йыуындырып, ҡырындырып, кейемдәрен номерлап, сәғәте бармы, ҡармағы бармы — башҡаһын барыһын да, төймәләренә тиклем ҡағыҙға теркәп, бомбоубежищеға төшөрөп ҡуйҙылар. Аҙаҡ бирка буйынса алырға тейеш булалар.

Немец һалдаты, ҡатын-ҡыҙ һымаҡ, янында һәр саҡ энә, еп, булавка йөрөтә. Уларҙың һәр береһендә блокнот, авторучка. Кейемдәре менән уларын да тапшырттылар.

Госпиталдә тәртип шәп ине. Йыуынып сыҕыуыңа:

— Мә, һиңә таҫтамал, таҙа күлдәк-ыштан, бер пар йоҡа ойоҡбаш, бер пар йылы ойоҡбаш, бумазыйҙан тегелгән өр-яңы пижама, башлыҡ, бер пачка папирос, теш щеткаһы, кер һабыны, шырпы, — тип кенә торалар. Шунан инде:

— Әйҙә, столовойға!

Бик шәп ашаттылар. Өс йөҙ грамм арыш икмәге, бәлеш, ҡоймаҡ бешерергә йөҙ грамм аҡ он, биш йөҙ грамм йәшелсә, ике йөҙ алтмыш грамм ярма йә макарон, егерме биш грамм сухофрукт, илле грамм шәкәр, ҡырҡ грамм май, ҡырҡ грамм печенье йәки шоколад, йөҙ илле грамм ит, һикһән грамм колбаса йәки селедка.

Әсир немецтарҙы ла һәйбәт ашаттылар. Улар ҙа, беҙҙең кеүек, бер үк ашханала ашаны.

Минең тәнемдә мина ярсыҡтары күп булған. Сүпләп алып бөттөләр. Яраларым уңала төшөп, “ходящий раненый” хәленә ингәс, госпиталдең рәссамы булып кителенде. Тәүҙә ҡағыҙға эшләп алам да бейек стенаға күсерәм. Уға тиклем комендант раҫлай, мөһөрөн баҫып тороп. Минең төп эш Гитлерға теләһә ниндәй формала карикатура яһау булды. Берәүһе бигерәк тә шәп килеп сыҡты. Кәрәк булған икән апҡайтырға. Ул ваҡытта йәшлек. Беленмәгән. Сталиндың приказдарын, воззваниеларын ташҡа баҫҡан һымаҡ яҙа инем. Шулайтып, һуғыш дәүерендә госпиталдә һәйбәт йәшәп алынылды.

### Немец полковнигынан бәҙрәф таҙарттырғаным

Минең ҡустым да фронтта ине. Ул эргәлә генә булған. Әсир немецтарҙы эшкә алып йөрөгән. Немец баш эйеп кенә йөрөмәй. Бер тапҡыр простынялар ялғап, өсөнсө ҡаттан төшөп, госпиталдән ҡасырға булғандар. Беҙҙең разведка һәйбәт эшләне. Ундайҙарын төшкән ерендә үк атып һалып ҡуйҙыҡ.

Беҙ ҙә, әсир немецтар ҙа хәжәтебеҙҙе атҡарырға бер үк бәҙрәфкә йөрөйбөҙ. Күмәк кешегә, ни, 4х4 метрлы иҙәне тиҙ бысрай. Бер саҡ немецтың бер подполковнигын сығарып алдым да бәҙрәфкә индерҙем. Индерҙем дә:

— А-ну! Иҙәнде йыу! — тим тегегә.

— Мин бәҙрәф йыуыусы түгел! Мин — офицер! Начальствоға ялыу яһаясаҡмын! — ти. — Нишләп мине мыҫҡыл итәһең?

— Ә һеҙ нишләп беҙҙекеләрҙе мыҫҡыл иттегеҙ? Ни өсөн ҡатын-ҡыҙҙы таланығыҙ? Ни өсөн һуғыш башланығыҙ? — тигәс, әллә ниндәй пакт тураһында һөйләй. Берәһен дә признавать итмәйем. Ҡаты торам. Ҡулда автомат.

— Шнел-л-л!!! — тип аҡырҙым да, тәьҫирлерәк булһын өсөн, һауаға атып алдым. Анда ла ҡаршылашып маташҡайны, бил ҡайышымдағы разведчик финкаһын алғайным, сепрәк тотоп, эшләй башланы. Ашау шәп бит инде быларҙың да. Ҡорһаҡ бүртәйгән, елкә ҡалынайған. Быштығып китте. Йыуҙырҙым.

Шул ваҡиғанан һуң, бер аҙна үттеме-юҡмы, өҫтән комиссия ебәргәндәр. Беҙҙе, тышҡа сығарып, теҙеп ҡуйҙылар: немецтар — бер рәт, охранниктар — бер рәт. Беҙ минең менән ун туғыҙ кеше инек, бер рәт булып теҙелгән булдыҡ. Артта НКВД һалдаттары теҙелде. Рәттәрҙе ҡарап сыҡтылар. Шунан генералдарҙың береһе:

— Ҡемдә ниндәй һорауҙар бар? — тип һорай ҡуйҙы. Хәрби кейемдәге ҡыҙыҡай немецтарға тәржемә итеүсе булды — шул саҡ, тыҡ-тыҡ баҫып, әлеге немец подполковнигы сыҡты ла, минең яҡҡа ымлап:

— Бына ошо сержант, мине мыҫҡыл итеп, иҙән йыуҙырҙы. Мин — офицер, — тине. Мин автомат менән киҙәнергә иткәйнем — артта торған НКВД-шниктар әҙер генә торғандар, имеш, икеһе миңә килеп йәбеште. Әйләнә килеп һелтәп ебәргәйнем — өсөнсөһө килеп йәбеште. Мин әйтәм:

— А-ну! Егеттәр, китегеҙ әле! — тим. Ҡыҙып алынды бит инде. Мине көскә тынысландырҙылар. Ә теге ошаҡсы подполковник беҙҙекеләрҙә асыу ғына тыуҙырҙы. Генералдар ҙа аҡыллы булып сыҡты. Дошман офицерының ялыуына ҡараманылар. Һәр хәлдә, миңә яза биреүсе булманы.

Өсөнсө көнөнә госпиталь начальнигы:

— Молодец! Ысын Салауат затлы башҡорт икәнһең! — тине. Уның ҡыҙын беренсе, икенсе кластар программаһы буйынса ике-өс ай эсендә уҡытҡайным, шунан ул мине яҡындан белә ине. Ҡыҙы бик способный ине.

Шулайтып, госпиталдә дауаланғандың һуңында, тағы фронтҡа киттем.

## Рәхмәтуллиндың рәхмәт алғаны

Бөрйәндең Нәби ауылынан Рәхмәтуллин тигән бик атҡыс егет бар ине минең ҡул аҫтында. Бына уның менән булған бер хәл. Харьков йүнәлешендә булды булһа кәрәк. Беҙҙең миномет тау башындағы немецтарҙы ала алмай. Подкреплениеға Соколов тигән өлкән лейтенант ПТР бирҙе. Бирҙе лә:

— Һин ауылды алаһың! — тине. Былай, разведкаһыҙ-ниһеҙ, мине ебәрергә тейеш түгел ине. Разведка яһарға кәрәк ине — немец хут бирмәй: беҙҙекеләрҙең күренгән береһен ҡырып тик тора. Был Соколов тигән бәндә “Ура!” ҡысҡыртҡан була. “Ура!” ҡысҡырып, күрәләтә үлемгә барыу — егетлек түгел. Э-эй, эшкинмәгән! Исеме есеменә тап килеү түгел, яҡын да юламаған бер бестолковый офицер ишараты ине ул Соколов тигәндәре. Уның старший лейтенантлығынан минең старший сержант булыуым яҡшы.

...Яр аҫтында ғына ятыла. Баш ҡалҡытыр әмәл юҡ. Немец ҡайҙандыр атып тик тора. Самалап атыр инең, теге Соколов аттырмай.

— Күрәңме-юҡмы, атырға кәрәк бит инде! — Шулай тиһәм:

— Не вмешивайся! — ти.

Биноклдән ҡараһам, беҙҙән бер ике йөҙ — өс йөҙ метрҙағы өйҙөң тәҙрәһендә немец офицеры тора биноклдән ҡарап. Эргәһендә пулемет ултыра.

— Ана, ҡара, Рәхмәтуллин! — тим. Ул Рәхмәтуллин батырҙарса яман ғырылдап йоҡлай торғайны. Бер ғырылдай башлаһа, йоҡлайһың инде йоҡламай ҙа. Мин әйтәм:

— Тәүҙә офицерға ат. Беҙ бынан, мылтыҡ көбәгенә кейҙереп, кәпәстәрҙе, каскаларҙы күтәрербеҙ. Немец пулеметсыһы ата башлар. Шунда уныһын да бер төрлө итерһең.

Рәхмәтуллиным атып ебәрҙе — немец офицерын түкмәстерә атты ла ҡуйҙы. Беҙ кәпәс, каскаларҙы саҡ ҡына күтәреүебеҙ булды — аңғансы пулеметтары тыҡылдай ҙа башланы.

— Рәхмәтуллин, быныһын бронебойный менән ат! Пулеметсыһына теймәгән хәлдә лә, ҡоралын эштән сығарыр, бәлки, — тим. Рәхмәтуллиным бронебойный менән немец пулеметсыһын йәлпәйтә атты ла ҡуйҙы. Мин әйтәм:

— Молодец, Рәхмәтуллин! Рәхмәт һиңә!

Һуғыш бит. Батырлыҡ күрһәткәндәр күп инде ул.

## Рәхмәт тә юҡ, черт та юҡ

Донды сыҡҡас, бер ауылда яттыҡ та, икенсе көндө өй хужаһы булған бер балалы ҡатынға ярҙам күрһәттек. Немецтар уның һарығын һуйып ашаған. Ҡасҡан саҡта офицерҙары ике аяғына атып киткән. Ҡатын илай-илай фашистарҙы ҡарғай... Булған тиклем кәрәк-яраҡ бирҙек бахырға.

Шуның һуңында шунда уҡ йоҡларға ҡалдыҡ. Әлеге ғырылдап йоҡлаусы Рәхмәтуллин да ошо өйгә тура килде... Шулай булғас, беҙҙең нисек йоҡлағанды әйтеп тораһы ла түгел...

Иртәнсәк сығып ҡараһаҡ, тирә-яҡ тип-тигеҙ ялан. Алдағы түбәләстә тегеләр нығынған. Беҙгә алға китергә кәрәк. Ап-асыҡ яланда ҡайҙа ышыҡланырға? Һигеҙ йөҙ метрҙа ике ДОТ. Береһенән төтөн сығып тора. Туптар ҙа атмай, минометтар ҙа. Пулеметтан аталар. Сөйәрембетов, әйткәнемсә, бик атҡыс ине. Мин әйтәм:

— Давай, ПТР-ыңды миңә бир, үҙем атайым әле. Һин, атҡыс кеше, винтовкаң менән...

Иртәнге һыуыҡ. Ун биш — ун алты градус самаһы булғандыр, ғинуар бит. Әйткәндәй, ғинуарҙың 21-еме әллә 22-һеме ине. Икебеҙ бер юлы атып ебәрҙек — мин ПТР-ҙан атҡан ДОТ янды ла китте бит. Сөйәрембетов атҡанында нимәлер шартланы ла ҡуйҙы. Тегеләр йән-фарман ҡаса, беҙҙекеләр ҡыуа башланы. Бер саҡрым самаһы ерҙән, прицелда теүәл үлсәп, шулай атып ҡара әле! Бөтәһе лә ҡырҙан күренеп тора. Бындай хәл һуғышта ғәҙәти ине. Ә былай ҡарағанда, геройлыҡ эшләгәнбеҙ. Башҡалар ДОТ амбразураһын кәүҙәһе менән ҡаплап геройлыҡ күрһәткәндә, беҙ, ҡан сығармай, саҡрым тирәһендә ятҡан ерҙән атҡарғанбыҙ ундай батырлыҡты. Быны өсөн рәхмәт тә юҡ, черт та юҡ... Ярай. Ундай ғына була инде...

## Бөтә Ер шары аша үткәндәй булыныл ды

4 февраль көнө, Харьковҡа етәрәк булһа кәрәк, ун туғыҙ тапҡыр атакала булдым. Аңғансы бомбежкаға эләгеп, тағы биш-алты ай ятып сыҡтым. Шунан Дунайҙы аша сығып, Австрияға килеп инелде. Швейцарияға етә яҙып, ун биш көн тауға күтәрелеп, ун биш көн кире төшөп, 1945 йылдың авгусында Вайс станцияһына килеп еттек.

Румынияны үттем, Венгрияны үттем. Бөтә Ер шары аша үткәндәй булыныл ды. Ғәскәрҙең иҫәбе-хисабы юҡ икән. Шунан килеп, аттарҙы тапшырҙыҡ. Аттар йәл

— уларға бер ҡабым үлән юҡ. Баҡсаларҙы, алмаларҙы ашап бөттөләр. Уларҙы тапшырыр урынға етә килә, ҡабыр нәмә бөтөнләй булманы. Һалдат яҙмышын уртаҡлашып, ут-һыуҙы бергә күсеп килеп-килеп, меҫкен аттар ас ҡайтты. Иң ҡыйыны шул булды.

## 1944 йылдың 11 ноябрендә булған хәл

Берн ҡалаһы янында торабыҙ. Ҡомандала биш йөҙ кеше. Беҙгә йылға аша сығырға ҡушылған. Бәләкәйерәк кенә катер биргән булдылар. Ҡапитан званиеһындағы моряк — старшой. Ҡатерҙы егерме ике румын хеҙмәтләндерә. Шул катерҙа йылға аша сығып бара инек, ул батты ла ҡуйҙы. Перегрузка. Э-э-й, ундағы мәхшәр! Ҡеше береһенә береһе йәбешеп батып бөттө... Ярға еткәс, баҫып булмай. Ағыҙып ала ла китә. Аңғанса бер егет, таяҡ һоноп, әжәл тырнағынан мине тартып сығарҙы.

— Ана, ике-өс таяҡ бар. Ҡилгән берен тартып сығарып торайыҡ, — тине шул егет.

— Шулай шул, — тип таяҡ алдым.

Беребеҙ тубыҡтанып тора, икенсебеҙ — билдән һыуҙа.

Шулай иттереп, беҙ икәү батып барыусы ун ике кешене ҡотҡарҙыҡ.

Иң һуңғыһы шул: беҙҙе 210-сы миномет полкына бирҙеләр. Унда штабҡа инеп киттем. Унан берәү ҡайтҡайны, урынына тәғәйенләнеләр. Ҡырҡлаған урыҫ араһында бер үҙем. Диктант яҙғанда минең хата иң әҙе булып сыҡты. Почерк та шәп. Офицер:

— Бына бит башҡорт нисек яҙа! Почергы ла матур! — тине.

Ана шунда, штабта, һуғыш бөткәс, наградной лист тултырып ултырҙым. Ҡиткәндән алып өлкән сержант булдым. Минең уҡытыусы булыуым мәғлүм ине.

— Давай, артабан уҡы. Һуғыш бөтһә лә, ҡайтмайһың. Званиеңды күтәрербеҙ, — тип өгөтләй башланылар.

— Минең әсәйҙе кем көтә?

Шунан мине был мәсьәлә менән борсомай башланылар.

1946 йылдың декабре ине. Мин ҡайтып киттем. Бөрйәндән фронтҡа киткәндә томанһыу, ҡар яуып тора ине, өйгә ҡайтҡанда ҡояшлы көн ине.

* * *

Минең взводта күпселек Бөрйән районы егеттәре булды. Баймаҡта ла бар әле минең хеҙмәттәштәр. Дөйөмләштереп әйткәндә, Бабсаҡ бей менән Ҡарағөләмбәт бейҙең вариҫтары бер төптән бына шулай һуғыштыҡ беҙ. Беҙҙең менән Ғафури, Ҡырмыҫҡалы районы табындары ла бергә һуғышты.

Һуғыш шундай нәмә ул, ҡустым. Аны һөйләп бөтөрлөк түгел.

## Зөлҡәрнәй ағай һөйләгән риүәйәттәрҙән

### Иҫән ауылы

Иҫән ауылын, хәҙергесә әйткәндә, Бөрйән районы кешеләре нигеҙләгән бит аны. Атай шулай һөйләй торғайны. Иң алда Әтек яғынан Бәхтегәрәй ауылы күсеп килгән. Шунан Янһарынан беҙ күсеп килгәнбеҙ. 1600 йылдарға тура килә микән

— асыҡ ҡынаһын хәҙер әйтеүе ҡыйын. Иҫән ҡарттың Әлекәй тигән ҡустыһы булған. Беҙ шул Әлекәйҙән килгән тоҡом булабыҙ инде.

Минең атай — Әнәс, уның атаһы — Хафиз, уның атаһы — Утарбай, уның атаһы — Әлмәс, уның атаһы — Йәрмөхәмәт, уның атаһы — Аралбай, уның атаһы — Моталлап, уның атаһы — Әлкәй, уның атаһы — Байбаҡты, уның атаһы — Ҡилембәт, уның атаһы — Янһары (Ейәнһары) олатай. Янһары-Ейәнһары үҙе — Собханғолдоң балаһы.

Беҙҙең бит инде Мәсем тигән ханыбыҙ булған. Беҙҙең ата-бабалар Азов диңгеҙенән — Тын (Дон) йылғаһына, Тын йылғаһынан — Димгә күсеп килгән. Димдән — Маҡар тирәһенә, Маҡарҙан был Бөрйән яғына йәйләүгә сығып йөрөгәндәр ҙә, шунан килеп, Янһары-Ейәнһары ауылын ҡороп, шунан был яҡҡа сығалар.

Борон ҡатнашып йәшәгәндәр. Шулай йөрөй торғас, Һаҡмар буйына килеп ултырғандар, шунан Талҡаҫтың арғы яғына күскәндәр. Ул заманда Талҡаҫ тирәһе ҡара урман була. Әле мин белгәндә лә бөрйән тоҡомло ҡорттар эйәләгән солоҡтар була торғайны. Улар ҡарағастан юнылған ине.

Күлдең эсендәге балы-ыҡ! Иҫең китерлек ине — туп-тулы! Аттың ҡойроғонан ҡыл йолҡоп алаһың да, мәскәү яһап, мәскәүләп алып атып тик тораһың. Йәки ике-өс малай сауыл ҡырҡып алып, шуның менән һөҙөп үтһәң, ике-өс биҙрә балыҡ сыға ла ҡуя торғайны. Ыштан менән һөҙһәң дә ике балағың да балыҡ булыр ине. Ҡисә балыҡ һөҙәләр. Ҡарап торған булам: бер таҙа балыҡ юҡ. Ун сантиметрҙай сабаҡ сыҡҡан була. Ҡош-ҡорттоң һаны булманы. Өйрәктең ниндәй төрҙәре юҡ ине унда.

Бөрйәндә йәндек күп була торғайны. Һыуһар, мышы, ҡор, һуйыр... Э-эй, шул хәтлем ине. Бөттө инде улар. Ағасты ҡырҡалар рәттән. Шунан ҡош-ҡорт ҡайҙан булһын, ти? Мөсәттә, Тарыуалда мышы, ни, мыжғып йөрөй торғайны. Бөрйәндәге Ишдәүләт ауылында уҡытыусы булды. Шул Ағиҙелдең аръяғына нурҙа һала торғайны. Атыу малайҙар ҡуймай, тип. Ҡараһа, бер нурҙа балыҡ! Ҡатыны уларҙы һатырға алып китә район үҙәгенә. Әпкилә, һата. Аҡса эшләй. Хәҙер булһа, халыҡҡа бер кәсеп булыр ине.

## Талҡаҫ

Ни өсөн беҙҙең күлде Талҡаҫ тигәндәр? “Таллы” мәғәнәһендә, “тал” һәм “ҡаҫ” тигәндән килә. Тирә-яғы таллыҡ, әрәмә. Ул әҙәм үткеһеҙ күтерлек булған. Уртаһында шау ҡарағас урманлы, сейәле тау булған. Тирә-яғы батҡаҡ, әрәмә, мүклек. Берҙән-бер көндө шул тау убылып төшкән дә ҡуйған. Ҡарағастары әле лә күл төбөндә ята.

## Ҡах тауы

Ҡах тауы тигән тау бар бит инде. Ғайса Хөсәйенов ҡайһы бер һүҙҙәрҙең беҙ белмәгән мәғәнәһен белә. Беҙҙә Юпас тигән ара бар. Нимәгә улай тигәндәр, белмәйем. Беҙҙә Ҡалмыҡ тигән ара бар, Гәүһәр, Тыуышты, Ҡаҙаҡ, Юпас, Ҡомһоҙ тигән аралар бар. Ауыл бәләкәй түгел. Өс йөҙ хужалыҡ бар бында. Йот йылында (1921 йылда), һуғыш осоронда кешеләр күп үлә, йорттар кәмей. Ҡолхозлашыу башланғас, ауыл икегә бүленеп, бер-береһенә ҡаршы сығалар. Түбә посёлогы ул ваҡытта Йылайырға инә. Унда өс мең һумға эшләргә була. Ҡолхозда бер нәмә лә юҡ. Ҡолхоз рәйесенә бер эшкәлник эсерәһең дә справка алаһың. Справка алаһың да Түбә руднигына эшкә инәһең. Шул арҡала ауыл ныҡ кәмене. Ташландыҡ йорттарҙы утын итеп бөтөрҙөләр.